# О.С.Ушакованың дәреслектәренең тәржемәләре

## Уйынсыҡ бесәй, айыу, сысҡан тураһындаһүрәтләү хикәйәһе төҙөү

***Бурыстар:***

- *бәйләнешле телмәр:* өлкәндәр ярҙамында ҡыҫҡа ғына хикәйә төҙөргә өйрәтеү;
- *һүҙлек һәм грамматика:* телмәрҙә таныш хайуандарҙың исемдәрен нығытыу; сиффатты, хәрәкәтте белдергән һүҙҙәрҙе ҡулланырға өйрәтеү.
- *өн мәҙәниәте:* [м] – [м'], [п] – [п'], [б] – [б'] өндәренең һүҙҙәрҙә һәм фразаларҙа дөрөҫ, асыҡ әйтелешен нығытыу; өноҡшаш тауыштарҙы ишетеп айырырға өйрәтеү; үтенесте яғымлы белдерергә, тауыш көсө менән идара итергә өйрәтеү.

***Йыһазландырыу:*** уйынсыҡтар – бесәй, һыйыр, кәзә, барабан, сысҡан, айыу, пирамида, матрешка, паровоз, һарыҡ, баҡа, өйрәк бәпкәләре, ҡуян балалары, бесәй балалары.

**Эшмәкәрлек барышы**

*Ҡыңғырау яңғырай.*

**Тәрбиәсе:** Балалар, һеҙ ҡыңғырауҙы ишетәһегеҙме? Тимәк, магазин асылды.Ҡарағыҙ әле, магазинда нимәләр һатыла?

**Балалар:** Уйынсыҡтар.

**Тәрбиәсе:** Дөрөҫ, магазинда уйынсыҡтар һатылалар. Ә ниндәй уыынсыҡтар?

*Балалар яуап бирәләр.*

Әйҙәгеҙ, бергәләп уларҙы ҡарайыҡ. Был нимә?

*Балалар яуап бирәләр.*

Бесәй нисек мыяулай?

*Балалар өноҡшаш тауыш сығаралар.* Бесәйҙе нисек иркәләп, яратып әйтергә була?*Балалар яуап бирәләр.*

Кемдең бесәй тураһында һөйләгеһе килә?

*Бала тәрбиәсе менән берлектә һөйләй.*

Был… бесәй. Ул… йомшаҡ. Бесәйҙең … бәләкәй генә ҡолаҡтары, ҡара… күҙҙәре. Ә танауы уның… алһыу. Бесәйҙең ҡойроғо… оҙон. Бесәй …(һөт) ярата, ул һөттө … ялай. Ул мыяулай… *мяу!*

Ә был нимә сыйылдай? Пи – и – пи – и!

**Балалар:** Сысҡан.

**Тәрбиәсе:** Дөрөҫ, был сысҡан. Кем сысҡан тураһында һөйләргә теләй?

*Бала тәрбиәсе менән берлектә һөйләй.*

Был… сысҡан. Ул… ниндәй? Бәләкәй, һоро. Сысҡандың бәләкәй… ҡолаҡтары һәм оҙон… ҡойроғо. Сысҡан ….(баҙҙа) йәшәй, ул…. ярата. Сысҡан сыйылдай:… пи – и – пи – и!

Ә был нимә?

**Балалар:** Айыу.

**Тәрбиәсе:** Кем айыу тураһында һөйләйем ти.

*Бала тәрбиәсе менән берлектә һөйләй.*

Айыу… ҙур, йөнтәҫ. Ул…(урманда) йәшәй. Айыу … (бал, еләк) ярата.

Ә хәҙер һеҙ нимәнең тауышы икәнен белергә тейеш булаһығыҙ,кәзәнеңме(күрһәтә) әллә һарыҡтыңмы(күрһәтә)?

*Тәрбиәсе өноҡшаш тауыштар сығара (мә – ә - мә – ә, бә – ә – бә-ә),балалар хайуандарҙы әйтәләр.*

Кәзә ниндәй тауыш сығара?

*Балалар өноҡшаш тауыш сығаралар.*

Ә һарыҡ нисек баҡыра?

**Ял минуты**

**Тәрбиәсе:** Беҙҙең магазинда уйынсыҡтар бик күп. Һеҙ үҙегеҙгә уйынсыҡтар һатып алырға теләйһегеҙме?

*Балалар яуап бирәләр.*

Беҙҙең магазинда һатыусы бар. Ҡурсаҡ һатыусы буласаҡ. Уның исеме Мәҙинә. Һатыусы уйынсыҡтар һата. Һатыусы нимә эшләй? Ә бөтә балалар һатып алыусылар булалар. Һатып алыусылар нимә эшләйҙәр?

*Балалар яуап бирәләр.*

Һатып алыусы магазинға килә лә, яғымлы һорай: “Мәҙинә, зинһар, миңәпирамиданы бир әле”.

Уйын бөтә уйынсыҡтар “һатып” алынып бөткәнсе дауам итә. Уйын барышында тәрбиәсе ҡурсаҡ исеменән балаларҙы уйынсыҡтарҙың атамаларын аныҡ әйтергә этәрә, ҡабатлап һорай: “Һиңә ҡуян кәрәкме, әллә ҡуян балаһымы? Аҡмы, әллә көрәнме? Һиңә баҡаны бирергәме? Һиңә ниндәй пирамида кәрәк – бейекме, әллә тәпәшме? ” һ.б.

Бөтә тауарҙар һатылып бөттө, беҙҙең Мәҙинәнең бер уйынсығы ла ҡалманы. Мәҙинәгә күңелһеҙ. Һин, Мәҙинә, ҡайғырма, балалар һинең менән бүлешерҙәр. Шулаймы? Әйҙәгеҙ, Мәҙинәгә бөтә уйынсыҡтарҙы бирәйек. Һәр кем уйынсығын әйтергә тейеш, уның менән нисек уйнарға кәрәклеген, йәки ул нимә эшләй белгәнен аңлатырға тейеш.

*Балалар эшләйҙәр.*

Тәриәсе балаларҙан фекерҙәрен дөрөҫ һәм тулы әйтеүҙәрен талап итә (“Мәҙинә, бына һиңә матрешка. Ул матур, уны йыйырға, һүтергә була. Был барабан, унда уйнап була. Миндә бесәй, ул мыяулай”).

Мәҙинә һеҙ шулай изге күңелле булғанығыҙ өсөн бик шат. Хәҙер уның уйынсыҡтары бик күп. Мәҙинә улар менән уйнай: машинаны йөрөтә, барабанда уйнай, матрешканы һүтеп йыя.

*Ҡурсак уйынсыҡтар менән бер нисә хәрәкәт эшләй.*

Ә хәҙер, балалар, сәғәткә ҡарайыҡ әле. Магазинды бикләргә ваҡыт.

**Мәҙинә һәм Наҙгөл ҡурсаҡтарын һүрәтләү**

***Бурыстар:***

- *бәйләнешле телмәр:* тәрбиәсенең һорауҙары буйынса хикәйә төҙөргә өйрәтеү;
- *һүҙлек һәм грамматика:* предметтарҙың атамаларын, сифаттарын, хәрәкәттәрен дөрөҫ әйтергә өйрәтеү; предметтарҙы *ҙур, бәләкәй* сифаттарын ҡулланып, ҙурлығы буйынса сағыштырырға өйрәтеү; исемдәрҙе сифат менән яраҡлаштырырға өйрәтеү.
- *өн мәҙәниәте:* [д] – [д’], [ҙ] – [ҙ’] өндәренең әйтелешен нығытыу.

***Йыһазландырыу:*** парлы предметтар: ҡурсаҡ (ҙур һәм бәләкәй), туптар (ҙур һәм бәләкәй, төрлө төҫлө), ике биҙрә (төрлө ҙурлыҡтағы һәм төҫтәге); һыбыҙғы, ҡыңғырау.

Эшмәкәрлек барышы

**Тәрбиәсе:** Ҡарағыҙ әле, беҙгә кем килгән?

**Балалар:** Ҡурсаҡтар.

**Тәрбиәсе:** Был ҡурсаҡтың исеме  Мәҙинә. Ул ҙурмы әллә бәләкәйме?

*Балалар яуап бирәләр.*

Айзилә, ҡурсаҡ тураһында һөйлә әле. Ул нимә кейгән?

*Бала һөйләй. Тәрбиәсе ярҙам итә.* Нәсимә, ә һин бәләкәй ҡурсаҡты күрһәт.*Бала күрһәтә.*

Уның исеме  Наҙгөл. Ул ниндәй?

**Балалар:** Матур, һылыу.

**Тәрбиәсе:** Уның сәстәре ниндәй?

*Бала яуап бирә.* Күлдәге ниндәй төҫтә?*Бала яуап бирә.*

Һеҙ ҡурсаҡтар менән нисек уйнайһығыҙ?

*Балалар яуап бирәләр.*

Ә хәҙер ҡурсаҡтар тураһында һөйләгеҙ.

*Бер-ике хикәйә төҙөйҙәр, тәрбиәсе ярҙам итә. Ярҙамсы һорауҙар бирә.*

Мәҙинә һәм Наҙгөл ҡурсаҡтар уйнағандар ҙа, йөрөп килергә булғандар.Мәҙинә үҙе менән туп алған. Был ниндәй туп?

**Балалар:** Ҙур.

**Тәрбиәсе:** Ул ниндәй төҫтә?

*Балалар яуап бирәләр.*

Был туп ниндәй?

**Балалар:** Бәләкәй.

**Тәрбиәсе:** Ул ниндәй төҫтә?

*Балалар яуап бирәләр.*

Һеҙ туп менән нимә эшләйһегеҙ?

*Балалар яуап бирәләр.*

Кем туптар тураһында һөйләйем ти?

*Балалар һөйләйҙәр.*

Тағы ла  Наҙгөл ҡурсаҡ үҙе менән ике биҙрә алған: береһе… ҙур, ҡыҙыл,икенсеһе … бәләкәй, күк. Биҙрә менән нисек уйнарға була?

**Балалар:** Уға ҡом, ҡар һалып, һыу ҡойоп уйнарға була. **Тәрбиәсе:** Кемдең биҙрәләр тураһында һөйләгеһе килә? *Балалар тәрбиәсе менән берлектә һөйләйҙәр.*

Был… биҙрә. Ул… ҙур, ҡыҙыл. Мин биҙрәгә …(ҡом, ҡар) һалам.

Афарин, һеҙ Мәҙинә нисек … (туптар) менән уйнағанын, ә Наҙгөл …(биҙрәләр) менән уйнағанын бик яҡшы һөйләнегеҙ.

**Ял минуты**

**Тәрбиәсе:** Әйҙәгеҙ, уйнап алайыҡ. Бөтә балалар туптар булалар. Улар ҙур тупһымаҡ бейекккә һикерәләр.

*Балалар туптар булалар, шунан урындарына ултыралар.*

Мәҙинә урамда уйнаған да, өйгә ҡайтҡан. Уның өҫтәлендә … ятҡан(

**Балалар.** Һыбыҙғы.

**Тәрбиәсе:** Тыңлағыҙ әле, Мәҙинә нисек һыбыҙғыла уйнай. Һыбыҙғы йырлай:ду – ду – ду. Һыбыҙғы нисек йырлай?

*Балалар яуап бирәләр.* Мәҙинә нимәлә уйнай? *Балалар яуап бирәләр.*

Наҙгөл ҡурсаҡ өҫтәлендә … тапҡан(Ҡыңғырау күрһәтә.) Был нимә?

**Балалар:** Ҡыңғырау.

**Тәрбиәсе:** Ҡыңғырау зыңғырлай: динь – динь – динь. Мәҙинә нимәлә уйнай?

**Балалар:** Һыбыҙғыла.

**Тәрбиәсе:** Наҙгөл нимәне зыңғырлата: динь – динь – динь? Данил, һыбыҙғыла уйна әле (ду – ду – ду), ә һин, Нәсимә, ҡыңғырауҙы зыңғырлат (динь – динь – динь). Ҡарағыҙ әле, минең өҫтәлемдә ниндәй уйынсыҡтар (һыбыҙғы, туп, ҡыңғырау, биҙрә). Мәҙинә ҡурсаҡ һеҙҙең менән уйнағыһы килә. Ул хәҙер бер уйынсыҡты йәшерә, һеҙ әйтегеҙ, ниндәй уйынсыҡ юҡ булды.

Ҡурсаҡ уйынсыҡты "йәшерә", ә балалар әйтәләр, ниндәй уйынсыҡ йәшенгән. Тыңлағыҙ әле: һыбыҙғы, биҙрә. Был һүҙҙәрҙә [ҙ] өнө ишетеләме? Был һүҙҙәрҙә ниндәй өн бар?

## Уйын ойоштороу "Кәримәнең тыуған көнө"

***Бурыстар:***

- *бәйләнешле телмәр:* өлкәндәр ярҙамында уйынсыҡтар тураһында һүрәтләү хикәйәһе төҙөү;
- *һүҙлек һәм грамматика:* сифатты, хәрәкәтте һәм арауыҡ билдәләрен белдергән һүҙҙәрҙе дөрөҫ ҡулланыу күнекмәләре формалаштырыу; мәғәнәһе яғынан оҡшаш һәм ҡапма – ҡаршы һүҙҙәргә иғтибар итеү;
- *өн мәҙәниәте:* [г], [ с], [ҡ] өндәренең дөрөҫ әйтелешен нығытыу; һүҙҙәрҙе көслө һәм тыныс тауыш менән тиҙ һәм яйлап әйтеү күнекмәләрен камиллаштырыу.

***Йыһазландырыу:*** һүрәттәр (яҡынса йыйынтыҡ): тауыҡ, әтәс, күгәрсен,

бесәй, кәзә, һыйыр, ҡаҙ бәпкәһе, кәзә бәрәсе, бесәй балаһы,кәкүк; “Магазин” уйынын уйнау өсөн уйынсыҡтар.

**Эшмәкәрлек барышы** Тәрбиәсе: Балалар, ҡарағыҙ әле, бөгөн беҙгә кем килгән?Балалар: Ҡурсаҡ.

**Тәрбиәсе:** Эйе, дөрөҫ. Уның исеме Кәримә. Ҡурсаҡ ниндәй? Балалар: Матур, байрамса кейенгән.

**Тәрбиәсе:** Кәримәнең сәстәре ниндәй төҫтә?Балалар: Ҡара.

**Тәрбиәсе:** Сәстәре оҙонмы, әллә ҡыҫҡамы? Таҫмаһы ниндәй?

***Балаларҙың яуабы.***

**Тәрбиәсе:** Балалар, һеҙ нисек уйлайһығыҙ, ни өсөн Кәримә матур кейенгән?Балалар: Сөнки Кәримәнең тыуған көнө.

Уйын “Кәримәнең тыуған көнө”

**Тәрбиәсе:** Эйе, бөгөн Кәримәнең тыуған көнө. Беҙ уға тыуған көнөндә бүләктәр бүләк итәсәкбеҙ. Кәримә уйнарға ярата. Уға уйынсыҡтар бүләк итергә була. Уйынсыҡтар “Уйынсыҡ” магазинында һатыла. Бына был беҙҙең магазин. (Өҫтәл өҫтөндә ятҡан уйынсыҡтарға күрһәтә.)

(Ҡурсаҡ икенсе өҫтәл артында ултыра, балалар унда уйынсыҡтарҙы ҡуясаҡтар).

Мин һатыусы булам. Һатыусы нимә эшләй?

***Балаларҙың яуабы.***

Һеҙ һатып алыусылар булаһығыҙ. Һатып алыусылар ни эшләй?

***Балаларҙың яуабы.***

Һеҙ уйынсыҡты, беҙ уның тураһында бергәләп һөйләгәс кенә, ала алаһығыҙ: уйынсыҡ ниндәй, уның менән ни эшләргә була.

*Бала магазинға килә һәм уйынсыҡ һайлай. Тәрбиәсе балаға уйынсыҡ тураһында хикәйә төҙөргә ярҙам итә.*

Был… себеш. Ул… һары, йомшаҡ. Уның… күҙҙәре ҡара һәм ҡойроғо ҡыҫҡа. Ул сипылдай…сип – сип – сип.

Икенсе бала бесәй балаһы тураһында хикәйә төҙөй.

Мин бесәй балаһы һатып алырға теләйем. Иркәләп уны *бесәйкәй* тип өндәшәләр. Уны бес – бес, тип саҡыралар. Бесәй балаһы мыяулай белә, уйнарға ярата.

*Өсөнсө бала көсөк тураһында һөйләй.*

Мин Кәримәгә көсөк бүләк итәм. Ул аҡ төҫтә, таптары бар. Уның күҙҙәре ҡара, танауы ла ҡара. Көсөк һикереп, йүгереп уйнарға ярата.

*Ҡалған балалар һөйләгән балаға ярҙам итәләр, өҫтәп үҙҙәренең белгәндәрен әйтәләр. Бала уйынсыҡ тотоп “Кәримәнең” янына килә һәм үҙенең ҡотлау һүҙҙәрен әйтә: “Мин һиңә бесәй балаһы бүләк итәмс (көсөк һ.б.)”.*

Бөгөн Кәримәнең тыуған көнө. Кәримә беҙгә матур кейенеп килгән. Балалар уға буләктәр, уйынсыҡтар бүләк иттеләр. Кәримә балаларҙың бүләгенә бик ҡыуанды һәм уларҙы үҙенә ҡунаҡҡа саҡырҙы: “Рәхмәт балалар, үҙегеҙ ҡунаҡҡа килегеҙ”.

**Уйын “Ҡурсаҡтар һүрәт төшөрәләр һәм тышта йөрөйҙәр”**

*Кәримәгә ҙур һәм бәләкәй ҡурсаҡтар ҡунаҡҡа килгән.*

**Тәрбиәсе:** Ҡурсаҡтар һүрәт төшөрөргә теләйҙәр. Ҙур ҡурсаҡ оҙон ҡәләм, ә бәләкәй ҡурсаҡ ҡыҫҡа ҡәләм ала. Ҙур ҡурсаҡ ҙур өй, ә бәләкәй ҡурсаҡ бәләкәй өй эшләй. Ҙур өй ниндәй ҡурсаҡтың өйө? Бәләкәй өй ниндәй ҡурсаҡтың өйө?

**Балалар:** Ҙур өй ҙур ҡурсаҡтың өйө. Бәләкәй өй бәләкәй ҡурсаҡтың өйө.

**Тәрбиәсе:** Ҡурсаҡтар тышҡа уйнарға сыҡҡандар. Ә тышта көслө ямғыр яуа башлаған. Ҡурсаҡтар үҙҙәре менән зонтик алмағандар. Улар шыршы аҫтына йәшенгәндәр. Ҙур ҡурсаҡ бейек, ә бәләкәй ҡурсаҡ тәпәш шыршы аҫтына йәшенгәндәр. Ямғыр туҡтаған. Ҡурсаҡтар өйгә ҡайтҡандар. Ҙур ҡурсаҡ киң, ә бәләкәй ҡурсаҡ тар юлдан ҡайтҡан. Өйгә ҡайтҡас ҡулдарын йыуғандар.

Ҡурсаҡтар тәүҙә эҫе һыуҙың кранын, ә һуңынан һыуыҡ һыуҙың кранын асҡандар. Балалар, һыуыҡ һәм эҫе һыуҙы бергә ҡушһаң һыу ниндәй була? **Балалар:** Йылы, һалҡынса.

**Тәрбиәсе:** Ҡурсаҡтар йоҡларға әҙерләнгәндәр. Уларҙың карауаттары төрлө булған. Балалар, һеҙ нисек уйлайһығыҙ, ҡурсаҡтарҙың карауаттары ниндәй?Балалар: Бейек, тәпәш, ҙур, бәләкәй, киң, тар.

## Ял минуты

**Тәрбиәсе:** Балалар тышҡа уйнарға сыҡҡандар, ә унда ҡар яуған. Әйҙәгеҙ, ҡар бөртөктәренә өрәйек һәм улар осалар. Талғын һәм оҙаҡ итеп өрөргә кәрәк.

*Балалар хәрәкәттәр яһайҙар.*

Балалар ҡарағыҙ әле, тыштан уйнап ингәнсә, Кәримә һеҙгә һүрәттәр әҙерләгән. (Балаларға берәр һүрәт тарата.) Ул һеҙҙең һорауҙарға яуап биреүегеҙҙе теләй.

Данил, һинең һүрәтеңдә нимә төшөрөлгән?Данил: Әтәс.

**Тәрбиәсе:** Гөлназ, һинең һүрәтеңдә нимә төшөрөлгән?Гөлназ: Тауыҡ.

**Тәрбиәсе:** Әтәс һәм тауыҡ нимәләре менән айырылалар? Гөлназ: Әтәстең кикелеге ҙур һәм ҡойроғо ҙур.

**Тәрбиәсе:** Тауыҡ үҙенең себештәрен нисек саҡыра? Балалар: Ҡыт – ҡыт – ҡыт.

**Тәрбиәсе:** Һинең һүрәтеңдә нимә төшөрөлгән, Ильяс? Ильяс: Бесәй балаһы.

**Тәрбиәсе:** Ә һинең, Сания?Сания: Бесәй.

**Тәрбиәсе:** Бесәй ни эшләй?Сания: Ҡарап ултыра.

**Тәрбиәсе:** Камил, әйт әле, ҡаҙ нисек ҡаңҡылдай? Камил: Ҡаңҡ – ҡаңҡ – ҡаңҡ.

**Тәрбиәсе:** Камил, һинең һүрәтеңдә нимә төшөрөлгән?Камил: Күгәрсен.

**Тәрбиәсе:** Күгәрсенде саҡыр әле.Камил: Гөлдөр – гөлдөр.

**Тәрбиәсе:** Ә хәҙер бергәләп тиҙәйткес ҡабатлайыҡ.

- Ҡыт – ҡыт – ҡыт!
- Дуҫын саҡыра тауыҡ.

- Ҡыт – ҡыт – ҡыт!
- Етте уйнарға ваҡыт!

*Бер нисә тапҡыр ҡабатлана. Тәрбиәсе ҡушыуы буйынса балалар үҙҙәренең текстарын иң тәүҙә көслө тауыш менән, һуңынан тыныс, шунан тиҙ һәм аҙактан яйлап ҡабатлайҙар.*

## Йәшелсәләрҙе һәм емештәрҙе һүрәтләү

***Бурыстар:***

- *бәйләнешле телмәр:* предметты һүрәтләү күнекмәләре камиллаштырыуы;
- *һүҙлек һәм грамматика:* телмәрҙә исем, ҡылым, алмаштың һан менән тап килеүен формалаштырыу; ҡылымдарҙы активлаштырыу (шул иҫәптән антонимдарҙы ла);
- *өн мәҙәниәте:* [ш] өнөнөң дөрөҫ әйтелешен нығытыу; өндө һуҙып, бертында әйтергә күнектереү.

***Йыһазландырыу:*** уйынсыҡ ҡуянҡай, кишер, ҡыяр, алма, помидор, тоҡсай.

**Эшмәкәрлек барышы**

**Тәрбиәсе**: Балалар, мин бөгөн балалар баҡсаһына килгәндә юлда ҡуянды осраттым. Ул да балалар баҡсаһына китеп бара ине.Бына ул. Ҡуянды нисекиркәләп әйтергә (өндәшергә) була?

**Балалар:** Ҡуянҡай, йүгерәк ҡуян, йомшаҡ ҡуян... Тәрбиәсе: Был ҡуяндың нимәһе?

**Балалар**: Ҡолаҡтары.

**Тәрбиәсе:** Уның ҡолаҡтары ниндәй?Балалар: Оҙон.

**Тәрбиәсе:** Дөрөҫ, ҡуяндың ҡолаҡтары оҙон. Ә был нимә? Балалар: Ҡойроҡ.

**Тәрбиәсе:** Ҡуяндың ҡойроғо ниндәй?Балалар: Ҡыҫҡа.

**Тәрбиәсе:** Ҡуяндың ҡолаҡтары оҙон, ҡойроғо ҡыҫҡа. Ҡуян нимә эшләй беләә?

**Балалар:** Һикерә, йүгерә, кишер кимерә.

**Тәрбиәсе:** Йүгерек ҡуян, һинең тоҡсайың бар ине. Ул ҡайҙа?

*Ҡуян тоҡсайын сығара.*

Бына ниндәй ҡуяндың тоҡсайы. Ә тоҡсай эсендә нимәлер бар. Ҡыҙыҡ, тоҡсайҙа нимә ята икән? (Кишерҙе алып сығара.) Был нимә?

*Балаларҙың яуабы.*

Кишер ниндәй?

**Балалар:** Оҙон(са), ҡыҙыл.

**Тәрбиәсе:** Кишер оҙон, ҡыҙыл. Тағы бер тапҡыр ҡабатлайыҡ. *Кишерҙе өҫтәлгә һала, һәм ҡалған йәшелсәләҙе, емештәрҙе күрһәтә.* Ә был нимә?

**Балалар:** Ҡыяр. Тәрбиәсе: Ҡыяр ниндәй?Балалар: Оҙон, йәшел.

**Тәрбиәсе:** Дөрөҫ,ҡыяр оҙон, йәшел. Помидор ниндәй? Балалар: Түңәрәк, ҡыҙыл, ҙур.

**Тәрбиәсе:** Эйе, помидор түңәрәк, ҡыҙыл, ҙур. Был нимә?Балалар: Алма.

**Тәрбиәсе:** Алма ниндәй? Балалар: Ҡыҙыл, түңәрәк, ҙур.

**Тәрбиәсе:** Алма түңәрәк, ҙур, ҡыҙыл.

Балалар ҡабатлайҙар.

Кишер, ҡыяр, помидор – йәшелсәләр. Алма, мандарин – емештәр. *Тәрбиәсе емештәрҙе бер һауытҡа, ә йәшелсәләрҙе икенсе һауытҡа һала, ә балалар уларҙың атамаларын әйтәләр.*

**Тәрбиәсе:** Тимәк, алма – ул нимә?Балалар: Емеш.

**Тәрбиәсе:** Ә кишер?Балалар: Йәшелсә.

**Тәрбиәсе:** Ҡуянҡай ҡайҙа йәшәй?Балалар: Урманда.

**Тәрбиәсе:** Урманда хәҙер һыуыҡ, йыш ҡына ел иҫә. Ел нисек иҫә? *Балалар ел иҫкән тауышты әйтеп күрһәтәләр: шшш – шшш - шшш.* Ял минуты

**Тәрбиәсе:** Балалар, хәҙер беҙ уйнап алабыҙ. Ярты төркөм балалар ҡуяндар, ә яртыһы – ел булалар. Ел иҫә башлаһа ҡуяндар өшөмәҫ өсөн һикерешәләр.

*Балаларҙың бер төркөмө тәрбиәсе менән бергә өноҡшаш уйын әйтәләр, ҡалғандәр ҡуяндар булып һикерешәләр. Һуңынан урындары менән алмаштырышалар.*

Ел иҫә, ағастар шаулай: шшш – шшш – шшш, ҡуяндар һикерешәләр. Ел иҫеүенән туҡтай һәм ҡуяндар үҙҙәренең өңдәренә ҡайталар.

*Тәрбиәсе йәшелсәләҙе, емештәрҙе тоҡсайға йыйып һала.*

Ә хәҙер, ҡуян һеҙҙең менән уйнап ала.Ул тоҡсайҙың эсенән сығармайса бер предметты ала ла уның тураһында һөйләй. Һеҙ ҡуян нимә тураһында һөйләгәнен белеп әйтергә тейешһегеҙ. Иғтибар менән тыңлағыҙ.

1. Ул оҙон, ҡыҙыл. Был нимә?
2. Ул йәшел, оҙон. Был нимә?
3. Ул түңәрәк, һарғылт ҡыҙыл. Был нимә?
4. Ул түңәрәк, ҡыҙыл. Был нимә?

*Предметты әйткәндән һуң бер бала өҫтәл янына сығып уны ала һәм һөйләй:”Был кишер, ул оҙон,ҡыҙыл..”. Әгәрҙә яуап тулы булмаһа тәрбиәсе һорауҙар менән ярҙам итә.*

**Тәрбиәсе:** Әйҙәгеҙ, ҡуянға бәләкәй генә тел төҙәткес әйтеп ишеттерәйек:Ша – ша – ша – Шакир шарға талаша.

Шы – шы - шы – ҡыҙыу уйын барышы.

Һүҙҙәрҙе иғтибар менән тыңлағыҙ әле: Шакир, шар - был һүҙҙәрҙә ниндәй өнишетелә?

*Балаларҙың яуабы.*

Ә хәҙер йомаҡ тыңлағыҙ, нимә тураһында икән. Ҡолаҡтары оҙон, ҡойроғоҡыҫҡа. Был нимә?

*Балаларҙың яуабы.*

**Фирүзә һәм Фәрит исемле ҡурсаҡтар тураһында сюжетлы хикәйә төҙөү**

***Бурыстар:***

- *бәйләнешле телмәр:* тәрбиәсе ярҙамында һәм үҙаллы хикәйә төҙөргәөйрәтеү**;**
- *һүҙлек һәм грамматика*: ҡапма ҡаршы мәғәнәле һүҙҙәрҙе телмәрҙәҡулланырға өйрәтеү;
- *өн мәҙәниәте*: [ф ]- [ф' ], [в ]- [в' ] өндәреннең дөрөҫ әйтелешен нығытыу, был өндәрҙе ишетә белергә һәм тауыш менән баҫым яһап әйтергә өйрәтеү; тауыш көсөн көйләү.

***Йыһазландырыу:*** малай һәм ҡыҙ ҡурсаҡ, эт, флаг, 2-шәр кәнфит

**Эшмәкәрлек барышы**

Тәрбиәсенең өҫтәлендә Фирүзә һәм Фәрит исемле ҡурсаҡтар, Филя исемлеэт, кәнфиттәр, флажоктар ята.

- Был кем ул?
- Фәрит исемле малай, Фирүзә исемле ҡыҙ, Филя исемле эт.
- Кем флажоктарҙы алып килгән?
- Фәрит.
- Кем улар тураһында һөйләргә теләй?

*Балалар ҡыйынһынһа тәрбиәсе фразаның башын күрһәтә.*

-.......... Был ҡыҙыҡай, уның исеме Фирүзә. Фирүзәгә Фәрит ҡунаҡҡа килгән. Ул флажоктар алып килгән. Фирүзә менән Фәриткә ҡунаҡҡа эт килгән. Уның исеме Филя. Филя кәнфит алып килгән. Тағы ла Филя балаларға алмалар алып килгән. Алмаларҙы вазаға һалғандар. Тыңлағыҙ әле мин в-в-ваза һүҙен нисек ҡабатлайым. (2 тапҡыр ҡабатлай). Был һүҙҙә ниндәй өн бар?

*Балаларҙың яуабы.*

- Кем миңә ваза һүҙендә [в ] өнөн ишетерлек итеп әйтә?
- Ә хәҙер башҡа һүҙҙәрҙе ҡабатлағыҙ: Ф- фирүзә, Ф-фәрит. Фирүзә һүҙендә ниндәй өн айырым ишетелде?Кем миңә Фирүзә һүҙендә [ф ]өнөн айырып әйтер ишеттерә?

*Балаларҙың яуабы.*

- Балалар ҡарағыҙ әле Филя һеҙгә һүрәттәр алып килгән. Бәләкәй генә һүрәттәр ҙә бар, ҙурҙары лабар. Мин һеҙгә уларҙы таратып бирәм (тарата). Миндә лә һүрәт. Был нимә?
- Бейәләй.

-..................................................Тыңлағыҙ әле мин был һүҙҙе нисек итеп әйтәм. (һүҙҙе таҙа итеп әйтә, [б ] өнөнә баҫым яһай). Ә хәҙер һеҙ ҙә үҙегеҙҙең һүрәттәрегеҙҙәге һүҙҙәрҙе минеңкеүек әйтегеҙ. (Вилка, велосипед).

**Уйын " Шат һәм бойоҡ ҡурсаҡ"**

- Мәҙинә ҡурсаҡтары - Айгөл һәм Тәнзилә менән уйнап йөрөгән һәм Айгөлдөң һәр ваҡыт шат, ә Тәнзиләнең бойоҡ булыуын һиҙгән. Нисек уйлайһығыҙ, ни өсөн икән?

- Тәнзиләне үпкәләткәндәр, уға бик ҡыйын, ул күңелһеҙләнә.
- Тәнзиләнең күңелһеҙләнеүен тағы ниндәй һүҙҙәр менән әйтергә мөмкин?
- Моңһоу, борсоулы.
- Тәнзилә нимә эшләй?
- Ул күңелһеҙләнә, борсола, моңһоулана.
- Тәнзиләнең кәйефен күтәрер өсөн нимә эшләргә кәрәк?
- Күңелле әкиәт һөйләргә, уйнарға, йәнһүрәт ҡарарға.
- Айгөл менән Тәнзилә хәҙер нисек?
- Күңелле, шат.

**Ял минуты**

*Балалар түңәрәккә торалар.*

- Ел иҫкән. Ел нисек иҫә?

*Балалар ел иҫеүен күрһәтәләр.*

-Ә хәҙер ел көсәйгән.

- Көслө тауыш менән күрһәтәләр.
- Балаларға һыуыҡ булып киткән, улар йылыныр өсөн һикереп алырғабулғандар.

**Уйын “Бер һүҙ менән әйт”**

- Иҫкә төшөрөгөҙ әле, ҡурсаҡтар ҡайҙа йоҡлағандар?
- Карауатта.
- Улар әйберҙәрен ҡайҙа һалғандар?
- Шкафҡа, гардеробҡа.
- Улар нимәгә ултыра?
- Ултырғысҡа.
- Мин башлайым ә һеҙ дауам итегеҙ: карауат, шкаф...
- Ултырғыс, өҫтәл, диван, кресло.
- Был предметтарҙы ниндәй бер һүҙ менән әйтеп була?
- Йорт йыһаздары.
- Ә һеҙҙең өйҙә ниндәй йорт йыһаздары бар?

*Балалар яуаптары.*

- Ҡурсаҡтар шкафҡа нимә һалалар?
- Унда нимә ята һәм эленеп тора? Дауам итегеҙ: күлдәктәр, салбарҙар... (юбкалар, кофталар). Был әйберҙәр нисек атала? Кейем- һалым. Һеҙ ниндәйкейем кейгәнһегеҙ?
- Балалар яуабы.
- Хәҙер мин һеҙҙең иғтибарлығығыҙҙы тикшереп ҡарайым. Һеҙ мин нисек әйтәм шуны ғына ҡабатлағыҙ. Мин һүҙҙәрҙе ҡысҡырып әйтәм икән һеҙ ҙә ҡысҡырып әйтерһегеҙ, ә мин ипләп кенә әйтһәм һеҙ ҙә иплəп кенә ҡабатлағыҙ.

*Тәрбиәсе түбәндәге фразаны төрлө темпта ҡабатлай “Айыуҙар велосипедта йөрөйҙәр”*

- Дөрөҫ кенә итеп әйтегеҙ әле:В –в -Вәлиҙә яңы в –в –велосипед; Ф-

ф-Фәриттәф-ф-флажок.

Төрлө темпта ҡабатлайҙар [ф ] һәм [в ]] өндәренә баҫым яһап әйтәләр.

## Һауыт- һабаны һүрәтләү

***Бурыстар:***

- *бәйләнешле телмәр:* тәрбиәсе ярҙамында бәләкәй хикәйә төҙөргә өйрәтеү;
- *һүҙлек һәм грамматика:* һауыт –һабаны аңлатҡан предметтарҙыдөрөҫ атап әйтергә өйрәтеү, уларҙың тәғәйенләнеше тураһында күҙаллауҙарын формалаштырыу; аш-һыу менән бәйле һүҙҙәр менән таныштырыу (шәкәр- шәкәр һауыты, һ.б.);
- *өн мәҙәниәте*: [с ]өнөнөң дөрөҫ әйтелешен нығытыу,һүҙҙәрҙә был өндөңбулыу, булмауын билдәләргә өйрәтеү.

***Йыһазландырыу:*** сынаяҡ аҫты менән ике сынаяҡ, бәләкәй тарелкалар, сәйнүк, салфетка менән салфетницалар, кәнфит һауыты, ҙур ҡурсаҡтар (ҡыҙ һәм малай); һүрәттәр- ултырғыс, өҫтәл, быйма, пальто.

**Эшмәкәрлек барышы**

- Ҡарағыҙ әле, был нимә?Балалар яуабы.
- Был ҡурсаҡ Сулпан. Сулпан дуҫы Фәритте ҡунаҡҡа саҡырған. Улар сәй эсергә әҙерләнә. Сулпанға өҫтәл ултыртырға ярҙам итәйек . (Күрһәтә). Былөҫтәл. Ә был нимә?
- Өҫтәл ябыуы.
- Сәй эсер өсөн өҫтәлгә нимәләр ҡуйырға кәрәк?Балаларҙың яуабы.
- Сәй эсер өсөн һауыт- һаба кәрәк. (Ҡумтанан һауыт- һабалар ығара, балаларға уларҙы атап әйтергә ярҙам итә). Сынаяҡ аҫты менән сыаяҡ, сәйнүк, балғаалаҡ, бәләкәй тәрилкәләр кәрәк. Ә бәләкәй тәрилкәләр ни өсөн кәрәк икән?
- Пирожный, кәнфит, печенье һалыр өсөн.
- Ә балғалаҡтар ни өсөн кәрәк?
- Шәкәрҙе болғар өсөн.
- Ә шәкәрҙе ҡайҙа һалабыҙ?
- Шәкәр һауытына.
- Тағы ла салфеткалар кәрәк. Ә ни өсөн кәрәк икән улар?
- Ҡулдарҙы ауыҙҙы һөртөр өсөн.
- Ә уларҙы ҡайҙа һалабыҙ?
- Салфетка һауытына.
- Ә кәнфиттәҙе ҡайҙа һалырға була?
- Кәнфит һауытына.
- балалар тәрилкә, сынаяҡ, сәйнүкте бер һүҙ менән нисек әйтеп була?
- Һауыт- һаба.

**Ял минуты**

- Балалар уйнап йөрөгәндәр. Улар шар өрөргә булғандар.
- Бына шулай : с-с-с.

Балалар бер тында [с ] өнөн ҡабатлайҙар.

- Ниндәй шарҙар килеп сыҡты?Балалар күрһәтә.
- Ә хәҙер балалар шарҙар менән бергә һикереп алайыҡ.

**Уйын "Кем күберәк хәрәкәтен әйтер?"**

- Сәскәләрҙе нимә эшләп була?
- Өҙөргә, ултыртырға, ҡарарға, һоҡланырға, бүләк итергә, еҫкәргә, вазағаултыртырға һ.б.
- Урам һепереүсе нимә эшләй?
- Һерепә, таҙарта, сыскәләргә һыу ҡоя, юлдарҙы ҡарҙан таҙарта, юлдарға ҡомһала.
- Самолет нимә эшләй?
- Оса, геүләй, өҫкә менә, ултыра.
- Ҡурсаҡ менән нимә эшләп була?
- Уйнарға, тышта йөрөргә, ашатырға, дауаларға, йыуындырырға, биҙәндерергә. *Балаларҙың һәр дөрөҫ яуабына төҫлө таҫмалар бирелә. Кем күберәк таҫма йыя, шул еңеүсе була.*

***Уйын "Ҡайҙа нимә эшләргә була?"***

- Урманда нимә эшләргә була?
- Йөрөрөгә, бәшмәк йыйырға, еләк йыйырға, ҡоштарҙы тыңларға, ял итергә.
- Йылға буйында нимә эшләргә була?
- Һыу төшөргә, сумырға, ҡыҙынырға, кәмәлә ( катерҙа, теплоходта) йөҙөргә,балҡ ҡармаҡларға.

**Уйын "Һөйләмде әйтеп бөтөр?"**

- Тәрбиәсе һөйләмде әйтә башлай, ә бала әйтеп бөтөрә). Әлиә йоҡонан уянғанһәм… (йыуынырға барған, тешен йыуған, иртәнге гимнастика эшләгән һ.б.).

Кәрим кейенгән һәм… (уйнарға сыҡҡан, футбол уйнарға сыҡҡан, урамғасыҡҡан һ.б.). Ҡуян ҡурҡып киткән һәм… (ҡыуаҡ араһына йәшенде,

ҡалтыранып китте,ҡасып китте һ.б.).Илгенә Үпкәләне һәм … ( илап ебәрҙе,бер кем менән дә һөйләшмәне һ.б.)

*Һөйләмдең әйтеп бөтөлмәүен тәрбиәсе интонация менән белдерә. Тәрбиәсе уйын схнәләштерә.*

- Фәрит Сулпанға уйы тәҡдим итә: "Миндә бик ҡыҙыҡлы һүрәттәр бар. Мнһиңә уларҙы күрһәтәм, ә һин нимә төшөрөлгәнен әйт".

Фәрит Сулпанға һүрәт күрһәтә, ә Сулпан [с ] өнөн тауыш менән билдәләппредметтарҙы әйтә. Мәҫәлән:

- Был нимә?
- С-сәғәт.
- Балалар с-сәғәт һүҙендә [с ] өнө бармы?

- Бар
- Был нимә?
- Бййма.
- Быймаһүҙендә [с ] өнө бармы?
- С-сулпан  һүҙендә [с ] өнө бармы?
- Ә Фәрит һүҙендә?

**“Буратиноның тоғонда нимә бар?” уйыны**

***Бурыстар:***

-*бәйләнешле телмәр:* телмәрҙә предметтың сифатын (күләм,төҫ) дөрөҫ ҡулланырға , тәрбиәсенең һорауына яуап бирергә, хикәйә төҙөргә өйрәтеү;

-*һүҙлек һәм грамматика:* исемдәрҙе эйәлек килештә күплек формаһында

ҡулланыу, исемдәрҙең сифат менән яраҡлашыуын күнектереү;

-*өн мәҙәниәте:* [н]-[н`] өндәренең дөрөҫ әйтелешен нығытыу.

***Йыһазландырыу:*** парлы предметтар: матрешкалар, пирамидкалар (ҙур һәм бәләкәй), таҫмалар (төрлө төҫтә һәм оҙонлоҡта), аттар, өйрәк бәпкәләре, Буратино, бәүелсәк-ат, моҡсай.

**Эшмәкәрлек барышы**

**Тәрбиәсе:** Балалар, ҡарағыҙ әле, беҙгә кем килгән? (Балаларҙың яуаптары.)

-Дөрөҫ, Буратино. Буратиноның нимәһе был?Балалар:Танауы.

**Тәрбиәсе:** Буратиноның танауы ниндәй?Балалар: Оҙон.

**Тәрбиәсе:** Буратино серле тоҡ алып килгән. Әйҙәгеҙ бергәләп “Буратиноның тоғонда нимә?” тигән уйын уйнайыҡ. Һинең тоғоңда нимә, Буратино? Ул әйтә, һеҙгә уйынсыҡтар алып килдем, ти. Балалар, һеҙгә ҡыҙыҡмы, Буратиноның тоғонда ниндәй уйынсыҡтар бар икән?

**Уйын ”Буратиноның тоғонда нимә?”**

Тәрбиәсе үҙенең өҫтәленә балаларҙы берәрләп саҡыра. Бала тоҡтан уйынсыҡты сығара, атамаһын әйтә, ҡарай, тәрбиәсенең һорауҙарына яуап бирә һәм уны өҫтәлгә ҡуя.

–Был нимә? Балалар: Матрешка.

**Тәрбиәсе:** Дөрөҫ, был матрешка. Ул ҡайһылай матур! Ул һиңә оҡшаймы?Бала яуап бирә.

–Әйҙә ҡарайыҡ, матрешканың эсендә нимә бар икән? Тағы матрешка. Эргәһенә ҡуй. (Бала үтәй.)

-Иҙел, хәҙер һин  уйынсыҡты ал.(Бала тоҡтан уйынсыҡ сығара.)

-Был нимә? Балалар:Пирамидка.

**Тәрбиәсе:** Эйе, был пирамидка. Йә күрһәт әле, пирамидканың ҡыҙыл түңәрәге ҡайҙа? (Бала күрһәтә.)

- Ә был түңәрәк ниндәй төҫтә? (Бала яуап бирә.)

-Пирамидканы  өҫтәлгә ҡуй. (Бала үтәй.)

-Әлиә, ҡара әле, тоҡта тағы ла пирамидкалар бармы икән? (Бала тоҡтан пирамидканы ала һәм алдағы пирамидканың эргәһенә ҡуя.)

-Әлиә, был ниндәй пирамидка?

-Бәләкәй.

Тәрбиәсе: Ә был?

-Ҙур.

**Тәрбиәсе:** Буратино тағы нимә алып килгән? Был нимә?Балалар: Ат.

**Тәрбиәсе:** Аттың ҡойроғо ниндәй?Балалар.Оҙон.

(Икенсе бала тоҡтан тағы бер атты сығара.) Тәрбиәсе:Был аттың нимәһе?

**Балалар:** Аяҡтары.

**Тәрбиәсе:** Ә аттың аяктары ниндәй?Балалар: Уның аяктары оҙон.

**Тәрбиәсе:**Ат ниндәй? Оҙон аяҡлы. Ҡабатлағыҙ әле.

(Балалар ҡабатлайҙар. Бергәләп һәм айырым ҡабатлатырға мөмкин.)

-Ә был нимә? (Тоҡтан өйрәк бәпкәләрен сығара.) Кря-кря-кря.(Ҡыжҡ-ҡыжҡ- ҡыжҡ) Былар өйрәк бәпкәләре. Балалар, тоҡта тағы нимәлер бар. Айнур, хәҙер һин ҡара әле.(Бала тоҡтан таҫма сығара.)

-Был нимә? Балалар: Таҫма.

**Тәрбиәсе:** Таҫма ниндәй төҫтә? (Балалар яуап бирәләр.)

-Нәйлә, ҡара әле, ә был нимә?Нәйлә.Был да таҫма.

**Тәрбиәсе:** Ул ниндәй? (Ике таҫманы сағыштыралар.)

-Беренсе таҫма оҙон,ә икенсеһе?Балалар: Ҡыҫҡа.

**Тәрбиәсе**: Ҡарағыҙ әле, Буратино күпме уйынсыҡтар алып килгән: бында матрешкалар, һәм пирамидкалар, һәм таҫмалар, һәм өйрәк бәпкәләре. Ә хәҙер әйҙә, бер бала ике уйынсыҡты алһын һәм улар тураһында һөйләһен.(Ике-өс хикәйә тыңлайҙар.Кәрәк булғанда тәрбиәсе балаға ярҙам итә.)

**Уйын”Ат”**

**Тәрбиәсе**: Хәҙер беҙ уйнайбыҙ. Атта йөрөгөгөҙ киләме?(Балалар яуап бирәләр.)

-Бына беҙ ултырҙыҡ, һәм атта елдерәбеҙ. Ә ат шәберәк сапһын өсөн, беҙ уны ҡыуалайбыҙ:н-но-о,н-но-о!

-Ат арыны һәм туҡтаны.

**Тәрбиәсе:** Буратино һеҙҙең менән уйнарға теләй. Ул уйынсыҡтарҙы йәшерәсәк, ә һеҙ нимә юҡ булғанын әйтерһегеҙ:матрешкалар, пирамидкалар, өйрәк бәпкәләре йәки башҡа уйынсыҡтар.

(Тәрбиәсенең өҫтәлендә өс пар предметтар: матрешкалар, пирамидкалар,аттар )

**Тәрбиәсе:** Матрешкаларҙы ала, уларҙың урынына таҫмалар һала.)

-Ниндәй уйынсыҡтар юғалды?

**Балалар:** Матрешкалар.

**Тәрбиәсе:** Дөрөҫ, матрешкалар.Уларҙың урынына Буратино таҫмаларҙыһалды. (Таҫмаларҙы ала.) Нимә юҡ булды?

**Балалар:** Таҫмалар.

**Тәрбиәсе:** Дөрөҫ, таҫмалар юҡ булды. Ә бында, таҫмалар ятҡан ергә,

Буратино пирамидкаларҙы ҡуйҙы.

**Тәрбиәсе:** (бөтә уйынсыҡтарҙы йыйып ала) Нимә юғалды? Балалар: Уйынсыҡтар.

**Тәрбиәсе:** Ниндәй уйынсыҡтар юҡ булды? (Балаларҙың яуаптары.)

## К.Чуковскиҙың "Тауыҡ себеше" әкиәтен һөйләү

***Бурыстар:***

-*бәйләнешле телмәр:* тәрбиәсенең һорауҙарына дөрөҫ яуап биререгә өйрәтеү; һорауҙар буйынса К.Чуковскиҙың "Тауыҡ себеше" әкиәтенең йөкмәткеһен һөйләү;

- *өн мәҙәниәте:* [ҡ], [к`] өндәренең әйтелешен нығытыу, ошо өндәр менәнһүҙҙәрҙе һәм фразаларҙы асыҡ һәм дөрөҫ әйтергә өйрәтеү, күнектереү.

***Материал:*** уйынсыҡтар-тауыҡ, себештәр, әтәс, ҡара бесәй, фланелеграф,әкиәт персонаждары фигуркалары.

**Тәрбиәсе:** Был нимә?Балалар:Тауыҡ.

**Тәрбиәсе:** Тауыҡ сыҡты йөрөргә.Үҙенең себештәренә ем эҙләй. Тауыҡ себештәрен саҡыра:"Ко-ко-ко!" Тауыҡ себештәрен нисек саҡыра? (Балалар ҡабатлайҙар)

-Тауыҡ себештәре йүгереп килделәр һәм бойҙай, ем сүпләйҙәр. Тауыҡ себештәре нимә эшләйҙәр? (Балалар яуап бирәләр.)

-Әтәс йүгереп килде.(Уйынсыҡты күрһәтә.)Ҡысҡырҙы:"Ки-ки-ри-күк!"- ул да ем сүпләй башланы. Ә ҡара бесәй (күрһәтә) йәшенгән һәм себештәрҙе күҙәтә.Тауыҡ быны күреп ҡала һәм себештәрен саҡыра"Ко-ко-ко,ко-ко-ко, алыҫҡа йөрөмәгеҙ!"

-Балалар, тауыҡҡа ярҙам итәйек һәм себештәрҙе бергәләп саҡырайыҡ. (Балалар себештәрҙе саҡыралар.)

**Ял минуты**

*Тәрбиәсе хәрәкәттәр әйтә, ә балалар уларҙы үтәйҙәр.*

**Тәрбиәсе:** Мин әсәй-тауыҡ, ә һеҙ минең себештәрем. Бына себештәр тышҡасыҡтылар, йөрөйҙәр, тәпәйҙәрен өҫкә күтәрәләр, ем, бойҙай эҙләйҙәр.

Әсәй-тауыҡ бойҙай бөртөктәре тапты һәм себештәрен саҡыра:"Ко-ко-ко!"Себештәр йүгереп килделәр һәм ем сүпләй башланылар...

Себештәр - балаҡайҙар, өйгә ҡайтайыҡ, мин һеҙгә әкиәт һөйләйем.(Әкиәтуҡый.)

**Тауыҡ себеше**

Бер тауыҡ себеше йәшәгән, ти. Ул бәләкәй булған. Бына ошолай.(Күрһәтә.) Әммә ул үҙен ҙур,тип уйлаған, һәм башын юғары күтәргән. Бына шулай. (Күрһәтә.) Уның әсәһе булған.Әсәһе уны нығ яратҡан. Әсәһе ошолай булған. (Күрһәтә.) Әсәһе уға селәүсен ашатҡан. Селәүсендәр ошолай булған.(Күрһәтә.) Бер көндө әсәһенә ҡара бесәй ташланған һәм уны ихатанан ҡыуып ебәргән. Ҡара бесәй ошолай булған.(Күрһәтә.) Тауыҡ себеше ҡойма эргәһендә бер үҙе ҡалған. Ҡапыл ул ҡоймаға матур ҙур әтәс менгәнен күрә. Әтәс муйынын ошолай һуҙа һәм бар көсөнә ҡысҡыра:"Ки-ки-ри-күк!". Әтәс эре генә тирә-яҡҡа ҡарап ала. (Күрһәтә.) "Мин шәп! Мин көслө!"

Себешкә был бик оҡшап ҡала. Ул да муйынын һуҙа.Бына шулай. (Күрһәтә.) Һәм бар көсөнә сипылданы:"Пи-пи-пи! Мин дә шәп, мин дә көслө!" Әммә әләгеп күләүеккә ҡоланы. Бына шулай. (Күрһәтә.) Күләүектә бер тәлмәрйен ултырған. Ул себеште күрә лә:"Ха-ха-ха! Һиңә әтәскә етергә оҙаҡ әле!"тигән. Ә тәлмәрйен ошолай булған.(Күрһәтә.) Шул ваҡытта себешкә әсәһе йүгереп

килә. Ул себеште йәлләне һәм ипләп кенә һыйпаны. Бына ошолай.(Күрһәтә.) К. Чуковский.

*Әкиәттең йөкмәткеһе буйынса һорауҙар.* 1.Был әкиәттә нимә тураһында һөйләнелә?2 .Тауыҡ себеше ниндәй булған?

3. Себештең кеме булған?4.Ул нимә ашаҡкан?

5.Әсәне ихатанан кем ҡыуған?6 .Себеш нимәне күргән?

7 .Себеш нисек сипылдаған?

8. Тауыҡ себешенән кем (нимә) көлгән?

9. Әсәһе нимә эшләгән?

Һорауҙарға яуап биргәс, тәрбиәсе сиратлап бер нисә баланы саҡыра. Ул балаларҙан әкиәтте өлөшләп һөйләп биреүҙәрен һорай.

Әкиәт һөйләгән ваҡытта персонаждарҙың фигуркаларын фланелеграфҡа ҡуйып барырға була.